**ШИШМӘ РАЙОНЫ ЯБАЛАҠЛЫ АУЫЛЫ**

**МӘХӘЛЛӘ “СӘЛӘМ” МӘСЕТЕ**





# Ябалаҡлы ауылы тарихы

*/Мәғлүмәти белешмә/*



**2021 йыл**

## Ябалаҡлым – ауылым минең

***Ябалаҡлым, ауылым минең***

***Олокүлем, Өйҙөрәгем, Димем.***

***Төндә төштәремдә һәр көн иçтәремдә***

***Онота алмам һеҙҙе тимен.***

***Һандуғасың һайрай таңдарҙа,***

***Балдар ғына тама талдарҙан.***

***Ҡараңғы төндәрен ябалаҡ тауышы***

***Шаңдау булып ҡайта тауҙарҙан.***

***Йәшел хәтфә генә болондарың,***

***Көмөштәй саф эсер һыуҙарың.***

***Быуаттарҙың серен мәңгелеккә һаҡлай***

***«Алтын һандыҡ» Әүлиә тауҙарың.***

***Тарихың бай, ауылым, һөйләрлек,***

***Ҡобайырҙар итеп көйләрлек,***

***Тыумаç тимә һиндә гәйрәтле батырҙар***

***«Алаç» әйтеп, ыласын сөйәрлек.***

***Ябалаҡлым, ауылым, минең***

***Яҡты йондоҙ аяҙ күгемдә,***

***Һүнмәç ҡояшым һин, ябалаҡ ҡошом һин***

***Мәңге балҡы йөрәгем түрендә.***

***/Лена БУЛАТОВА, Шишмә районы/***



## Сабып уйнар әле ҡолондар

*Аттар ҡайта ине туғайҙан*

*Елберҙәтеп болот ялдарын.*

*Сәсерәтеп ысыҡ тамсыларын,*

*Сәскәләрҙең ҡойоп таждарын.*



*Өйөр айғырҙары алдан саба ине*

*Томан ярып йәшел болондан.*

*Әсәләрен барлап, кешнәп ҡуя ине*

*Көмөш тояҡ, бөҙрә ҡолондар.*

*Яңы һауған һөттәй аҡ томандар,*

*Элеккесә, йәшелдән дә йәшел болондар.*

*Тик күренмәй, ауылым, аттарың*

*Ҡайҙа аҙашып йөрөйҙәр ҡолондар?!*



*Тағын төшөр әле аҡ томандар.*

*Ҡабат йәшелләнер болондар.*

*Буш ятмаҫ тим, ауылым, туғайың,*

*Сабып уйнар әле ҡолондар!*

*Көмөш тоҡ, бөҙрә ҡолондар!*

*/Лена Булатова, Шишмә районы/*

**“...Тарихын белмәгән**

**хаким менән**

**ҫөйләшергә ярамаҫ.**

**Халҡын ҫөймәгән,**




**ихтирам итмәгән кешегә**

**хаким булырға ярамаҫ...”**



# РОДОСЛОВНОЕ ДРЕВО
## Канзафари-бия и его потомков







Предком Канзафар-бия был Мен Садаклы Урадас-бий, а до него якобы – Бихан. По шэжэре минцев, опубликованном в книге *«Башкирские шэжэре» (Уфа, 1960)*, от Урадас-бия до Канзафари-бия жили 10-11 поколений. Бихан в этой книге не упоминается, да и в архиве подтверждений того, что в этом роде был Бихан, не нашлось.

Фамилию Курбангулов начал носить Ахмер, а до него Курбангул был Колсариным (Колсарбиев, Кулсарбиев).





# ШЕЖЕРЕ (РОДОСЛОВНАЯ) КАЗАНФАРИ – БИЙ (КАНЗАФАР - БИЙ)



Тысячеколчанный Урадач - *бий*

I степень Улан - *бий*

II степень Кучкар - *бий*

III степень Буга - *бий*

IV степень Балта - *бий*

V степень Унга - *бий*

VI степень Сангусин - *бий*

VII степень Сабуга-*бий* (Сасбуга) - *бий*

VIII степень Чубмусбен-*бий* (Чу - *бий*)

IX степень
**Казанфари (Канзафар) – *бий***



**Ҡәнзәфәр бей -**
мең ҡәбиләһе башҡорттарының башлығы, Башҡортостандың Рус

дәүләтенә ирекле ҡушылыуы инициаторы. Мең башҡорттарының Нуғай Урҙаһына ҡаршы көрәшен етәкләй.

**Ҡәнзәфәр**



| | |
|---|---|
| ***Эшмәкәрлек төрө:*** | *тархан* |
| ***Тыуған көнө:*** | *якынса 1520—1600 йй.* |
| ***Подданныйлығы:*** | *Рәсәй* |
| ***Вафат булған урыны:*** | *Асылыкүл тирәһе* |
| ***Атаһы:*** | *Муса бей* |
| ***Балалары:*** | *Кужабакты, Хоҙайбакты, Коҙаш, Дистан;* |

## Биографияһы

**Ҡәнзәфәр бей —**

исеме ғәрәп теленән тәржемә иткәндә «арыҫлан» тигәнде аңлата.

Төп мең башҡорт ырыуының башҡа башҡорт бейҙәре һәм тархандары кеүек үк, ырыу башлығы тип элекке Мавераннахра (хәҙерге Үзбәкстан территорияһындағы, Һыр-Дарья йылғаһындағы дәүләт) хакимы Һанаҡлы ханды Урадач бейҙе (Мең һаҙаҡлы Ураҙас бей), биләмәләре Каманың төньяҡ ярҙарынан алып көньяҡта нуғайҙар һәм һарттар, көнсығышта уйғырҙарға тиклем йәйрәп ята.

## Билдәлелек яулауы

1552—1553 йылдарҙа Бөйөк Кенәз Иван IV Казанды алғандан һәм Русь Казан ханлығын яулағандан һуң, нуғай мырҙалары Ҡара-Килембәт һм Аҡһаҡ-Килембәт Түрәхан менән берлектә был ерҙәрҙән китергә һәм рустарға буйһонған башҡорт ҡәбиләләрен көс менән алып китергә ҡарар итә. Мең башҡорттары нуғайҙарға ҡаршы баш күтәрә, уларҙың башлығы — иң йәш бей Ҡәнзәфәр була. Меңдәрҙең бер өлөшө нуғайҙар менән хәҙерге Кубань территорияһына китә, әммә башҡорттарҙың күпселек өлөшө Ҡәнзәфәр бей яғына сығып, тыуған ерҙәрендә ҡала. ***Яҙғыһын мең башҡорттарының дөйөм йыйылышы — Йыйында Муса бейҙең улы, мең ырыуҙарының элекке башлығы Субай түрәнең туғаны меңдәрҙең 12 ырыуы башлығы итеп һайлана.***

1554 йылдың ҡышында абруйлы меңдәр һәи ырыу старшиналары вәкилдәре башында Ҡаҙанға — ватандаштары исеменән Рәсәй батшаһы Иван Грозныйҙан меңдәрҙең (иң ҙур башҡорт ҡәбиләләренең береһе) Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуын һорап бара. Унда батша наместнигы, бояр Шуйский-Горбатов һәм кенәз Андрей Курбский менән көньяҡ-көнбайыш мең башҡорттарын рус подданныйлығына ҡабул итеүтураһында һөйләшеүҙәр алып бара. Иван IV Ҡәнзәфәр бейгә тархан дәрәжәһен бирә. Үҙ ерҙәрендәге аҫаба биләмәләренә «Жалованная грамота» ала.

***Ҡәнзәфәр бейҙең башҡорттар араһынан беренсе булып Аҡ батшаға барыуы, уның мең ырыуын бергә туплауын көньяҡ-көнбайыш мең башҡорттары шәжәрәләре раҫлай.***

## Ғаиләһе һәм балалары

***Ҡәнзәфәр бейҙең дүрт улы була:***

- Кужабаҡты бей;
- Хоҙайбаҡты бей;
- Ҡоҙаш бей;
- Дистан бей.

### *Меңдәрҙең аҫабалыҡ хоҡуғын раҫлау*

1667 йылда мең башҡорттары: Ҡоҙаш бей улы Йәнбаҡты кенәз; Дистан бей улы Мәхмүд бей; Яйыҡсабый бей улы Ҡамасыҡ бей һәм Урман бей улы Ураҙлы бей Мәскәүгә кенәз Алексей Михайлович Романовҡа вәкил булып бара. Батша, Иван IV биргән "Жалованная грамота" нигеҙендә уларға 1667 йылдың 12 майында аҫаба хоҡуҡтарын раҫлауған "Оберегательная грамота" бирә.

Икенсе тапҡыр 1671 йылда Йәнбаҡты кенәз һәм уның 11 юлдашы Мәскәүгә барып, батша Алексей Михайловичҡа мең ҡәбиләһенең ырыуҙары араһында ерҙәрҙе бүлеү грамотаһын биреү үтенесе менән мөрәжәғәт итә. 1667 йылда бирелгән "Оберегательная грамота" нигеҙендә Рәсәй батшаһы меңдәрҙең дөйөм аҫаба ерҙәрен 11 ырыу араһында бүлеү тураһында грамота бирә.

### *Меңдәрҙең ер биләмәләре*

Меңдәр барлығы 1 102 905 дисәтинә ергә эйә була. Ә мең олоҫтары барлығы:

- Өфө өйәҙе буйынса - 6;
- Стәрлетамаҡ өйәҙе буйынса - 4;
- Бәләбәй өйәҙендә - 9;
- Минзәлә өйәҙендә - 2.

***Дөйөм аҫаба ерҙәрҙе бүлгәндә:***

- Мең олоҫо кенәзе Ҡәнзәфәрҙең 4 улы: Ҡужабаҡты бей, Хоҙайбаҡты бей, Ҡоҙаш бей һәм Дистан бей;
- Сүплек бейҙең 4 улы (Субай түрә улдары): Яйыҡсабый бей (Яйыҡ Субы), Ҡадирсабый бей (Ҡадир Субы), Миңлесабый бей (Миле Субы) һәм Иҙелсабый бей (Иҙел Субы);
- Урман бей улы: Ураҙлы бей;
- Тәнекәй бей улы: Мәмбәтҡол бей (Нуғай мырҙалары менән көсенгән Ҡараман бейҙең ейәне);
- Аҡман мырҙа улы: Аккунды мырҙа (Яйыҡ ?).

1. ***Башҡортостан Республикаһының Благовар районында Кәнзәфәр бей исемендәге "Һарайлы" Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге ойошторолған.***

2.

***2021 йылдың 8 авгусында мең иле үҙенең олуғ улы шәхесе Мусабей улы Кәнзәфәр бейҙең Ябалаҡлы ауылында кәбер ташын яңыртты. Мәжлескә хөрмәтле ҡунаҡтар, ауылдаштар, ырыуҙаштар осрашып аҡ ҡорбан салынды, Ҡөрьән уҡылып зекер әйтелде.***



***Кәбер ташына Кәнзәфәр бейҙең ауылдаштарына әйткән һүҙе алтын хәрефтәр менән яҙылған:***

**“...Тарихын белмәгән хаким менән сөйләшергә ярамаҫ. Халҡын сөймәгән, ихтирам итмәгән кешегә хаким булырға ярамаҫ...”**

3.




***Ябалаҡлы ауылы “Сәләм” мәсете ҡаршыһында мең ҡәбилә ырыуы башлығы – Кәнзәфәр бейҙең бюсты урынлаштырылды.***

***Ошо эштәрҙе алдан йөрөп башҡарыусыларҙың береһе Ябалаҡлы ауылы имам хатибы Салауат Ҡорбанғәли улы Вәликәев. Ауылдаштары уның менән бик риза.***

# КЕМ УЛ ҠӘНЗӘФӘР БЕЙ?

*/tuvest.rbsmi.ru/articles/obshchestvo/kem-ul-nz-f-r-bey.- 25.01.2018.*
*Мәғлүмәттәр Р. Ҡорбанғоловтоң “Шәжәрә – тарих көҙгөһө”, Өфө – 2008, китабынан алынды/*

2012 йылдан Благоварҙа Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалында “Һарайлы” башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге эшләп килә. Ул халҡыбыҙҙың оло шәхесе Ҡәнзәфәр бей исемен йөрөтә. Күптәр уның кем икәнен белмәйҙер әле.

### *Кем һуң ул Ҡәнзәфәр бей?*

XVI быуат уртаһында Ҡасим ханлығы Рустарға буйһондоролоп, рус дәүләтенең көсәйеүен ишетеп, Нуғай урҙаһы мырҙалары менән улар ҡул аҫтында йәшәгән мең башҡорттары араһында ҡаршылыҡтар килеп тыуа. Нуғай хакимлегенә ҡаршы меңле башҡоттарының көрәшен атаҡлы Урдас бей нәҫеленән сыҡҡан ерле бейҙәрҙең береһе, әле беҙҙең Благовар районы территорияһына ҡараған Ҡышлауҙа йәшәгән (хәҙерге Баштирмә ауылы урынында) Ҡәнзәфәр бей етәкләй.

1552 йылдың октябрь айында урыҫтар Ҡазанды алғас, нуғайҙар ҡурҡыуға төшә. Улар башҡорттарҙы үҙҙәре менән Кубань яҡтарына алып китергә теләй. Ләкин меңлеләр быны менән риза булмай. Ҡәнзәфәр бейгә һәм уның арҡаҙаштарына Нуғай мырҙаларына һәм улар менән бергә ҡасып китергә йыйыныусы башҡорт бейҙәренә ҡаршы көрәшергә тура килә.

Ҡәнзәфәр бей үтә ҡыйыу һәм оло ихтыяр көсөнә эйә булған шәхес. Ул үҙҙәре өсөн бик кәрәк һәм киҫкен мәлдә тыуған төйәкте ташлап китмәҫкә, башҡа ҡәбиләләрҙең өгөтләүҙәрен тыңламаҫҡа, янау-ҙарынан ҡурҡмаҫҡа өндәп халыҡ алдында сығыш яһай. Уның өндәмәһе дөйөм халыҡтың ынтылышына һәм теләгенә тап килә. Меңлеләрҙең күпселеге тыуған илдәрендә ҡала, һуңыраҡ киткән башҡорттарҙың да күбеһе кире ҡайта.

Ҡазан буйһондоролғандан һуң Иван IV Иҙел-Урал регионындағы халыҡты үҙ ихтыярҙары менән Рус дәүләтенә инергә саҡыра. Азатлыҡ, дин тотоу буйынса үҙаллылыҡ һәм башҡа төрлө ташламалар бирергә вәғәҙә итә. Мең башҡорттары Иван Васильевич Грозныйға подданныйлыҡҡа ҡабул итеүен үтенеп, Ҡәнзәфәр бей һәм уның менән тағы ла Чүбүлүк, Урман, Томан, Теңәйҙең Ҡазанға батша наместнигына барыуы билгеле. Илселәр бик йылы ҡабул ителә. Башҡорттарҙы үҙ ҡул аҫтындағы халыҡтар иҫәбенә индерергә ризалаша. Улар батшаға, башҡа уңайлыҡтары булмағанлыҡтан, Ҡазанға саңғыла бара.

“Аҡ батша” меңлеләрҙән ниндәй байлыҡтар барлығын һорашып, башҡорттарға еңел генә яһаҡ һала – кемгә төлкө, кемгә һуҫар тиреһе, ә кемгә бал

менән түләргә ҡуша һәм ергә аҫабалыҡ бирә. Батша ҡаҙнаһына яһаҡ түләүҙән тыш, башҡорттар үҙ иҫәптәренә хәрби хеҙмәттә торорға тейеш була. Шулай итеп, мең башҡорттарының ырыу башлығы Ҡәнзәфәр бей етәкселегендәге вәкилдәр башҡорт һәм рус хөкүмәте араһында тәүге килешеү төҙөй.

Рус дәүләте составына инеүҙе һорап, меңле башҡорттарының танылған етәкселегендәге башҡорт илселәренең батша наместнигына барыуы һәм башҡорттар менән рус хөкүмәте араһында беренсе рәсми килешеү төҙөү – Башҡортостан тарихында киҫкен үҙгәреш мәле. Был үҙгәреш республика тарихын өр-яңы юлдан алып китә. Был ауыр һәм буталсыҡ ваҡытта Ҡәнзәфәр бей үҙен халҡының аҡыллы етәксеһе, алдан күрә белеү һәләтенә эйә дәүләт эшмәкәре итеп таныта, ҡатмарлы мәлдә ваҡиғалар үҫешенең йүнәлешен дөрөҫ хәл итә.

## Сал тарихҡа күҙ ташлап

*/Лена Булатова яҙмаһы, Шишмә районы/*

Бик күп нәмәләрҙе белгән олатай-өләсәйҙәребеҙ инде баҡыйлыҡҡа күскәнгә байтаҡ йылдар үткән. Хәҙер генә килеп уларҙың һөйләгәндәрен иҫкә төшөрөп ултырырға, хәтерләргә бер ни тиклем ваҡыт таптыҡ буғай. Телдән-телгә күсеп, яттан һөйләнеп килгән тарихыбыҙҙы юғалтҡаныбыҙҙы яңы аңлай башланыҡ. Ҡулыма килеп эләккән ошо боронғо ҡулъяҙмалар менән хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ла таныштыраһым килә, бәлки кемдер ҡыҙыҡһынып китеп яңы мәғлүмәттәр менән байытыр. Был мәғлүмәттәрҙе уҡытыусы, Дәүләкән районы Ҡаҙанғол ауылы кешеһе, Рәүеф Ғәфүр улы Мөхәмәтғәлин туплаған.

Башҡорттарҙың иң эре ырыуҙарының береһе булған мең ырыуының ҡырҡ-өйлө мең аймағына ҡарай ауылыбыҙ Иҫке Ябалаҡлы. Ағасыбыҙ – ҡайын, ҡошобоҙ – ҡарсыға, оранбыҙ – алаҫ, тамғабыҙ – пар ҡош ҡанаты. Ата-бабаларыбыҙ аҫаба башҡорттарынан.

“1906 йылда Дәүләкән районының Иҫке Яппар ауылында тыуған Миңниса абыстай Әхмәровала һаҡланған күренекле сәсән, мөғәлим, аҡ мулла һәм ваҡытында Иҫке Яппар ауылының мәктәп директоры, 1894 йылда тыуған Мөъмин мулла Ғилмановтың яҙмаларына нигеҙләнеп, ҡырҡ-өйлө мең башҡорттарына ошо ауылдар ингәнлеге күрһәтелгән, иҫке төрөк телендә яҙылған яҙыу алынды. Мәкәш ауылында тыуған Фәнисә абыстай Мәүлетҡол ҡыҙы Йосопова тәржемә ҡылды”, - тип бәйән итә яҙмаларында Рәүеф Ғәфүр улы. “Ҡырҡ-өйлө мең башҡорттарының баш мәркәзе булып Боронғо Мең ауылы – үғғҙ йылда барлыҡҡа килгән, Дәҫтән (Дистан) хан идара иткән, хәҙерге Әлибай ауылы”, - тип әйтелә, һәм шул уҡ яҙмала Ҡәнзәфәр бей идара иткән Ҡалмаҡсура ауылына 1446 йылда нигеҙ һалынған, 1501 йылда Иҫке Ябалаҡлы тип үҙгәртелә, ә Яңы Ябалаҡлы – 1524 йылда барлыҡҡа килгән”, - тейелә был ҡомартҡыла. Был тарихи материалдар төрөксә яҙылған, күсермәләре лә һаҡланған.

Ҡалмаҡсураға килгәндә, бөгөнгө көндә ауылыбыҙ туғайында Оло Ҡалмаҡсура, Бәләкәй Ҡалмаҡсура тигән күлдәр бар. Ололарҙың хәтерләүен иҫәпкә алғанда, борон

ауыл ике күл уртаһында урынлашҡан булған, яҙын Күгиҙел (Дим) йылғаһы ташып, һыу баҫыу сәбәпле, ауыл Оҙонкүл (Олокүл) буйына күсеп ултырырға мәжбүр булған. Исеме лә Ябалаҡлы тип үҙгәртелгән тип фараз ителә.

Ҡырҡ-өйлө мең аймағының нәҫелдәре араһында ҡалмаҡ тигәне лә мәғлүм. Беҙҙең көндәргә саҡлы һаҡланып килгән "Котлойәр мулла бәйете"ндә лә бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә иғтибар итмәү мөмкин түгел. **Ҡалмаҡсура ауылы Ҡәнзәфәр бейҙең нигеҙе.** Оҙонкүл – хәҙерге көндә Олокүл тип атала, Ябалаҡлы ауылы ултырған күл буйы, ул Дим йылғаһынан 1-1,5 км самаһы алыҫлыкта ята.

***Яҙғандарымды иҫбатлау өсөн "Котлойәр мулла бәйете" нең бер нисә юлын тәкдим итәм:***

## ҠОТЛОЯР БӘЙЕТЕ

Ваҡытында бик әүәл
Мең дәүләте булғандыр.
Тулы һыулы Күгиҙел,
Сылтырап аҡкан Өршәге,
Зәңгәр һыулы күлдәре,
Аслы, Ҡандра һыуҙары
Был ырыуға кергәндер.
Ҡалын ҡара урмандар,
Киртләс киткән тауҙары,
Иркен ялан-ҡырҙары
Булған ырыу байлағы.
Әүәл-әүәл электән
Ошо ерҙе төйәк иткән
Беҙҙең ата-бабалар.
Булған уның аҡыллы
Батырҙары, бейҙәре.
Тирә-яҡта дан тотҡан
Ҡәнзәфәр бей булғандыр.
Барлыҡ ерҙе берләштереп,
Ул булғандыр ҙур түрә.
Уның нигеҙ таштары
Ҡалмасура буйында.
Оҙонкүлдең буйҙары,
Донъя көткән шул ерҙә.
Һис бер нужа күрмәгән,
Береһенән-береһе матур
Өсәү булған ҡатыны.
Иң өлкәне, уңғаны –
Шәрифәһе матуры
Бүләк иткәндер уға
Тоғро булып үҫкәндәр.
Аҡ батшаға ҡушылғас,
Дүрт уланын йыйғандыр.
Васыяттарын әйтә һалып,
Ерҙәр бүлеп биргәндер.
Ҙур уланы Ҡоҙайбах
Нигеҙ ҡора һалғандыр
Йәмле Өршәк буйында.
Дәҫтән тигән уғланы
Дәрхән күлен үҙ итеп
Шунда нигеҙ ҡорғандыр.
Ҡуҙабахты батыры
Ҡыҙҙар тауы итәгендә
Нигеҙ ҡора һалғандыр.
Ҡоҙаш тигән уғланы
Өршәк, Үҙән буйында
Тормош көтә башлаған.
Иң кесеһе, Хәжәре
Ҡалған бейҙең янында.
Булған бейҙең дуҫтары,
Иң яҡыны, уң ҡулы –
Сөфлө тигән ярҙамсы.
Булған уның улдары –
Башҡорттарҙың батыры,
Яйыҡ-Сыбы тигәне
Ҡаршин яғын үҙ иткән.
Изел менән Миңлеһе
Ҡармасандың яғында
Нигеҙ һалып, ер алған.
Ҡәнзәфәр бей, үҙ итеп

Биш уланды, батырҙы.
Биш бармаҡтай берҙәм булып,
Батыр булып үҫкәндәр.
Буй-һындары етеү менән
Уҡ-һаҙағын алғандар.
Атаһының һүҙен йыҡмай,

Яҡын ҡорҙаштарына –
Ураҙ менән Мәмбәткә,
Яҡуп тигән муллаға
Бүләк иткән ерҙәрен.
Шулай итеп, мең ере
Ун бер олоҫтан торған.
Кәңәшләшеп бергәләп,
Улар бергә эш иткән.
Ҡаратундың итәгендә,
Йыйылғандар бергәләп.

Ябалаҡлы атамаһына килгәндә – бер версия буйынса, тирә-яҡ элгәре ҡалын урман менән ҡапланған, ябалаҡ бик күп булған, ошо ҡоштар сәбәпсе булған был атамаға тейелһә, икенсе версия буйынса – Ябалаҡ нәҫеле тәүләп күсеп ултырған был урынға, нигеҙ һалыусылар хөрмәтенә аталған, имеш. Ябалаҡ тигән нәҫел ысынлап та ауылда булған, улар нәҫеле бөгөнгө Хисмәтуллиндар фамилияһын йөрөтөүселәр тип раҫлана. Ауылыбыҙ тарихҡа бай. Һәр бер ер-һыу атамаһы үҙе бер оло айырым тарих.

## Былар мөһим сығанаҡтар

*/Рәүеф Ғәфүр улы яҙмаһы, Дәүләкән районы/*

***“Дәрхән күлдәренә барып,***
***Күңелде күрәм әле.***
***Дәрхән күлдәренә ҡарап,***
***Бер йырлап алам әле.***
***Дәрхән күлдәре тирәләп,***

***Аҡ тирмәләр ҡоролған.***
***Дәҫтән түрәне тирәләп,***
***Аҡһаҡалдар ултырған.***

*/Ноғомонова, Ғәзизә, 1924 йылғы, Иҫке Яппар ауылы/*

Тағы ла бер мөһим сығанаҡ. Был Ҡотлояр мулланың яҙмаһынан ҡалған бер киҫәк иҫкесә яҙылған ҡыяғыҙ. ***Тәржемәһе:***

“Мәшәррәф, ғариф вә ғизле, вә ғәрибле Ҡанзафарбей туды Ябалаҡ ҡәрйәһендә 936 миләди йылында.

Әлхәмделили вә кафи вәссәләм. Ибн Мусабей.

Ҡуйды дар Ҡәнзәфәр-бей 1012 шәһәре рамазан, унынсы август Йәннәте Мәьуала ҡыйл урынын ҡарар.

Язды Әсфәндийәр мулла, күсерде бу ҡыягаҙга Ҡотлояр мулла 1912 йылда”

***Иҫкәрмә, тәржемәhе:***

“Хөрмәтле бөйөк, hәм аҡыл эйәhе, hәм уҡымышлы Ҡәнзәфәр бей тыуды Ябалаҡ ауылында 936 миләди йылынды (Һижири йыл иҫәбе буйынса 1532 йылда). Аллаға дан булhын, уға тиңдәш башҡа юҡ. Мусабей улы.

Ҡәнзәфәрҙе 1012 йылдың рамазан айының 10 авгусында мәңгелек йортҡа ҡуйҙы.

Урының Мәьуала ожмахында ит.

Яҙды Әсфәндийәр мулла, бу ҡыягазга күсерде Ҡотлояр мулла.1912 йылда”.

Икенсе сығанаҡ булып Иҫке-Ябалаҡ ауылындағы бороңғо зыяраттағы ҡәбер ташы иҫбатлай. Ауылдың муллаhы Валикеев салауаттың күрhәтеүе hәм шулай уҡ Ҡырҡөйлө меңдәрҙең башлығы Халиуллин Флүстең әйтеүҙәре буйынса hәм шулай уҡ элекке ҡарттарҙың hөйләүҙәре буйынса, 1889 йылда тыуған Иҫке Ябалаҡлы ауылы Хәйретдинов Ғәләүетдин Хәйретдин олатайҙың күрhәтеүе буйынса, был ҡәберлектә Ҡәнзәфәр бей ерләнгән тип фараз итәләр. Ҡотлояр мулланың бәйете буйынса Ҡәнзәфәр бей Иҫке Ябалаҡлы ауылынан, уның төпсөк улы hуңынан старшина булып Хәжәр идара иткән. Ҡәнзәфәр бейҙең өс ҡатыны булған тип әйтелә был бәйеттә, Хәжәр нисәнсе ҡатынынан булғаны билгеhеҙ. Шулай итеп, миңә hәм күптәргә был сер булып ҡала. Иҫке-Ябалаҡлы ауылындағы ҡәберлек ташы, ундағы яҙыуҙар hәм тамғаларҙы тарихсылар тикшереп нөктә ҡуйыр тигән өмөттә ҡалабыҙ. Был ҡәберлектә кем икәне Ҡәнзәфәр бейме әллә уның төпсөк улы Хәжәр ерләнгәнме? Шуны асыҡларға кәрәктер тип уйлаймын.

## Ҫыбау – ҫыу буйы башҡорттары беҙ. Ябалаҡлы ауылы.

Хәҙерге Дәүләкән районы Ҡоръятмаҫ ауылы ла заманында Ябалаҡлы ерҙәре булған. Быны М. Аҡмулланың яҙғандары ла иҫбатлай: “Бынан 400 йыл элек Сәйет батыр Үҫәргән бейе Әмирҙең ҡыҙын алмаҡ була. Әмир ҡыҙын уға биреүгә ҡаршы була. Сәйет ҙур көс менән килә. Тик уны Үҫәргән батыры Көтөр ҡыйрата. Сәйет ҡасып ҡайтырға мәжбүр була. Әммә ул яңынан ғәскәр туплап, үҫәргәндәргә ҡаршы сыға. Үҫәргәндәр икегә бүленеп ҡасып китәләр. Бер өлөшө Ҡатайға, икенсеhе көнбайышҡа – Ҡоръятмаҫҡа китә. Ҡоръятмаҫта мадъярҙар йәшәгән була. Үҫәргәндәр мадъярҙар менән бергә йәшәйҙәр. Мадъяр тоҡомонан хәҙерге көндә 70 хужалыҡ бар. Үҫәргән ырыуы кешеләрен Сәғәҙәткирәй Сәйетғәле улы юл башлап алып китә. Улар килгәндә Ҡоръятмаҫ ерендә, Дим буйы Ябалаҡлы ауылы кешеләре күптән йәшәгән булалар инде. Ябалаҡлылар – аҫаба башҡорттар.

Ябалаҡлынан Мөхәмәҙүәли тигән бер оҫта hунарсы булған. Ул ҡош-ҡорт ата торған булған. Бер ваҡыт ҡор ата сыға. Бынан ҡор ҡаса ла ҡаса. Ҡор hис ятмаҫ булған. Шуға ошо ауылға Ҡоръятмаҫ тигән исем биргәндәр. Ҡоръятмаҫ тигән йылға ла бар”.

Ауыл ҡарттары һөйләүе буйынса Ҡоръятмаҫ – ҡоро ятмаҫ ерҙәребеҙ тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан.

Ауылдың ерҙәре бик киң булған, әлеге Благовар, Дәүләкән райондары менән сикләнеп, Өршәк буйҙарына саҡлы еткән. Яңы Ябалаҡлы, Биҡҡол ауылдарына ла ябалаҡлылар нигеҙ һалған. Нуриман районы Бикмырҙа ауылында әлеге көндә лә Ябалаҡ урамы бар, уны 1859 йылда Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙе 25-се башҡорт кантоны 12-се йортона ҡараған Ябалаҡлыла йәшәүсе 8 ғаилә 24-се башҡорт кантонына күсерелә. Ир-ат – 37, ҡатын-ҡыҙ – 30 кеше булған, Сәйфетдинов, Рафиҡов, Рәхимҡолов һәм Әбделбәшировтар ғаиләләре хәрби хеҙмәтен дауам итеү өсөн күсерелә (Ревизские сказки 1850 года сығанағы мәғлүмәтенән).



Ревизские сказки мәғлүмәттәренә ҡарағанда ябалаҡлылар хәрби хеҙмәт кешеләре булған, батша хөкүмәте алып барған, эске һәм тышҡы һуғыштарҙа, хәрби бәрелештәрҙә әүҙем ҡатнашып ҡына ҡалмаған, военнообязанный булған: Рәхимҡол Йәнбирҙин (хәҙерге Хисмәтуллиндар нәҫеле) юртовой старшина, йөҙ башы Муллаҡай Хәмзин – хорунжий, һ.б.

1982 йылғы Ватан һуғышында ла ябалаҡлылар дәррәү ҡатнашҡан. Тарихи бер миҫал килтермәй мөмкин түгел: А.О. Орловскийҙың “Һыбайлы башҡорт” һүрәтендә Ябалаҡлы ауылынан ошо һуғышта ҡатнашҡан Муллаҡай Иҫәнбаев төшөрөлгән.

Ауылда ябалаҡ, ҡупай, ҡатай, ҡырғыҙ ҡалмаҡ, маңҡа, шырау, аҡый, татар нәҫелдәре әлеге көндә лә көн күрә. Ҡупай нәҫеле боронғо нәҫелдәрҙән һанала, бөгөнгө көндә 11 быуын (300 йыллыҡ шәжәрәне Лена Булатова төҙөгән). Ҡатай нәҫеленең барлыҡҡа килеү тарихын мөғәлим Ғәзизов ағай яҙып ҡалдырған.




### Шәжәрәм – сал тарихҡа бағыр тәҙерәм

Иҫке Ябалаҡлы ауылы 40 өйлө мең ырыуына ҡарай. Алдағы һандарҙа ауыл тарихы менән бер аҙ таныштырып киткәнем инде. Ә хәҙер ошо ауылда борон-борондан көн иткән нәҫелдәр тураһында хикәйәтем. Ҡалмаҡ, ҡатай, шырау, ҡырғыҙ, татар, купай, ябалаҡ нәҫелдәре әлеге көндә лә бар. Ҡалмаҡ нәҫеленең ҡайҙан килеп сығыуын, элекке уҡытыусы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Мөғәлим Ғәзизов ҡартатай, атаһының һөйләүҙәренә нигеҙләнеп шулай тип яҙып ҡалдырған. «Каспий диңгеҙе буйында йәшәгән ҡалмаҡтар башҡорт ерҙәренә сапҡындар яһаған, һуғышҡа улар ғаиләләрен дә алып йөрөгәндәр. Шундай сапҡындарҙың береһендә башҡорттар ҡыҫырыҡлағас, ҡалмаҡтар сигенергә мәжбүр була һәм ҡабыҡ бишектә бер ир баланы торғоҙоп ҡалдыралар. Ябалаҡлы халҡы был баланы алып үҫтерә, өйләндерә һәм ошонан тарала ҡалмаҡ нәҫеле (Кәримов Сәлим, Кәримов Сөләймән, Яхин Лоҡман, Исхаков Сәләхетдин, Шәрипов Шәрәфетдин, Рамазан Фәрхетдин, Яхин Усман һәм Яхин Дәүләтбай).

*/Лена БУЛАТОВА, Шишмә районы/*

## Ҡатай нәҫеле шәжәрәһе

Мөғәлим Ишмөхәмәт улы үҙе ҡатай нәҫеле вәкиле. Ҡатай нәҫеле тураһында шундай мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған: Минең атайым Ишмөхәмәт, ҡарт атайым Бикмөхәмәт, уның атаһы – Ғәбделғәзиз, ә уның атаһы – Таңатыр. Таңатыр-ҡатай башҡорттары ырыуынан. Шуға беҙҙең нәҫелде бөгөнгө көндә лә ҡатай ҡушаматы менән йөрөтәләр. Ҡатайҙар Уҙән, Инйәр һәм Иҙелдең үрге ағымы араһында ҙур урман майҙандарын биләгәндәр, йәнлек аулап, дегет ҡайнатып көн күргәндәр. Әүжән (Абзян) Егәҙе (Зигазинск) заводтары һалынғас утын ҡырҡып, күмер яндырып яғыулыҡ менән тьәмин иткәндәр. Таңатыр 1750-1752 йылдарҙа тыуған булырға тейеш. 1774 йылда Салауат ғәскәре һуғышсыһы Таңатыр сотник Ҡаранай Моратов ҡушыуы буйынса Дим буйы башҡорттарын яуға күтәрер өсөн Ябалаҡлы ауылында ҡала. Ихтилалдың уңышһыҙлыҡҡа осрауы сәбәпле Таңатыр йәшеренергә, Ябалаҡлыла ҡалырға мәжбүр була. Ябалаҡлы карттары, - ауыл башлыҡтары яҡшы ҡабул итәләр, үҙ ҡыҙына өйләндереп кейәү яһайҙар. Шулай ҙа Таңатыр ауыл халҡы менән берегеп бөтмәй, айырым йәшәй, Ябалаҡлы буйы (соҡоро) урманында ҡыуыш ҡора, Дим буйы башҡорттарының ғөрөф-ғәҙәттәрен бик әкерен ҡабул итә. Ырыуҙаштары-ҡатайҙар уның Ябалаҡлыла ҡалыуын, тере булыуын яҡшы белгәндәр, ҡәрҙәштәре уны эҙләп килələр, тыуған еренә ҡайтырға өндәйҙәр, 40 десятина бай урманы барлығын, уны көтөүҙәрен еткерәләр. “Бында тамыр йәйгәнмен, йәшәргә өйрәнгәнмен, - тип ҡайтыуҙан баш тарта, ҡәрҙәштәр ризалығын бирեп айырылышалар».

Башҡорттарҙа борон-борондан ҡәрҙәшлек хистәре көслө булған, шул заманда атҡа атланып, урман йырып, йылға-күлдәр кисеп,тауҙар артылып нисәмә көндәр буйы михнәттәр күреп, йөҙәрләгән саҡырым ер үтеп туғандарын эҙләп килгәндәр бит!

Мөғәлим Ишмөхәмәт улы Ябалаҡлы ауылындағы йәшәүсе ҡатай нәҫелен барлағанда йомғаҡ осо башҡа тирә-яҡ ауылдарға ла барып тоташа, сөнки ҡыҙ биреп, килен алғандар. Илкәш, Ҡалмаш, Хәжәт, Үрге Хәжәт, Опто, Усман һ. б. ауылдар исеме телгә алына шәжәрәләрҙә.

/Лена БУЛАТОВА, Шишмә районы/

Һәр нәҫелдең исеме булған кеүек ҡушаматтары ла (исем атау) ҡыҙыҡлы, бөгөнгө көнгә саҡлы эйәһенә эйәреп йөрөй:

**Ажау** – Дәүләтшиндарға атала, Сәлимйән бабай балыҡсы ине, ажау балығын бик яратып ашаған.

**Дарай** – Бирҙеғоловтар, балыҡ кеүек шыма, йылғыр, тос.

**Сытырыш –** үҙҙәре бик тырыш, бер үк ваҡытта сытыр кеүек эләгешергә генә тора, ҡыҙыу, бәйләнсектәр – Әхмәтшиндар.

**Ҡот-ҡот** – Фәйзуллиндар, Йосоповтар, ҡомһоҙ, эшкә лә батырҙар, ашап та туя алмайҙар.

**Дажжал** – Ҡутлов Рәис абый, инәһе Ғәйниямал әбейҙе шулай атайҙар ине, уҫал, янъял сығарыусы (скандальные).

**Бозор** – бәләкәй генә, тәгәрмәк кеүек, уңған, етеҙ, дәртле – Гузин Минеғәлим бабайҙар.

**Майтабан** – Әмирхановтар,

**Бисура** – Моратшиндар.

Төлкө, Бүре, Бисура, Ҡуҡ бабай, Ух бабай, Уханай ҡарсығы, Пан бабай, Мишәр Ямал, Ат яңаҡ, Ҡырғыҙ, Әсә теле, Сирмеш, Сүреш, Төрөк, Изаҡа, Ҡупата, Ҡытай, Йәбрәй, Аҡый, Мәтәлим, Пүнәтәй, һ.б.

Ошондай ҡушаматтар менән йөрөтәләр ине ауыл кешеләрен, исемдәре бер үк булғанда, кем тураһында һүҙ барғанын бик тә яҡшы аңлап була торғайны.

Ауыл борон-борондан ҡымыҙы менән дан тотҡан. Петербург, Мәскәү ҡалаларынан /кымыҙсылар/ килеп ял итеп, ҡымыҙ менән дауаланыр булған. Ҡартинәйем Гөлйыһан Хисмәтуллинаның (1890 йылғы), Өйҙөрәк тамағында сатыр короп йәй буйы яталар ине. Өйҙә ҡымызниклар йәшәй, үҙебеҙ аласыҡта йәй үткәрә инек”, тигәне хәтерҙә. Беҙ белгәндә оҫта ҡымыҙ бешеүселәр Ғәтифә әбей Нуриманова, Бәҙәркәй әбей Гузина, Хәҙисә әбей Яхина, ҡәйнәм Шәмсебәҙәр Хисмәтуллиналар ине.





Колхоз ойошторолғас та, КТФ – ҡымыҙ етештереү фермаһы барлыҡҡа килә, махсус бейәләр күп була, бейә көтөүселәр Минеғәлим бабай Гузин, Ислам Ниғмәтйәнов,Ҡорбанғәли Вәликәев, Фәрит Вахитовтар була. Урып-йыйыу һөҙөмтәләре буйынса беренселекте алған өсөн “10 лет Башкирии” колхозына, ул ваҡытта шулай тип аталған , “Мак” исемле өйөр айғыры премияға бирелә.

Ауылда 2 ферма һауын һыйыры булды, алдынғы һауынсылар Мәҙинә Әхмәтшина, Зөлфирә Әмирханова, Рәшиҙә Гузина, Зайҙа Вахитова, Шәмсеҡәмәр Зөлҡәрнәева, Бибиямал Әмирханова, Мәғфиә Сәлимгәрәева, Миниярова Рәлиә, һ.б. Мал көтөүселәр Талип Шаянов, Бәғеҙәт Булатов, Әбүбәкер Иҫәнбаев, Мөғәлим Ҡәнзәфәров, һ.б. Әбүбәкер бабай заманында йәйәүләп тә көткән.

Ауылда колхоз 1929 йылда төҙөлгән һәм “10 лет Башкирии” тип аталған. Ауыл ҙур, сәсеүлектәр, бесәнлектәр киң булғанлыҡтан 3 бригадаға бүленгән, 1-се бригада – хәҙерге Фәрит Минеәхмәтовтар янында янында урынлашҡан, таш тимерлеге лә булған,  2-һе – хәҙерге Инсаф Дәүләтшиндар урынында, ат аҙбары һәмәндән һалынғайны, 67-се йылдарҙа ғына һүтеп алынды, 3-һө Ҡатай күленә яҡын.

Кулак тип, хәлле  генә йәшәгән Әхмәтйән, Ғәлимйән Хисмәтуллиндарҙы, Олоҡман Сәфәрғәлинды, Сәлим Кәримов, һ.б., ҡайһыһын атып, ҡайһыһын һөргөнгә ҡыуғандар.

Ябалаҡлының үҙ май яһау заводы булған (хәҙерге Иҙиәт Ғәләмовтар урыны). Ауыл советы ла Ябалаҡлыла урынлашҡан булған, ут төртөү сәбәпле янған, башҡорт ауылында ауыл советы булыуы өҫтәге түрәләргә оҡшап етмәгән.

Тимер тәгәрмәсле ХТЗ тракторына  Ҡотлоәхмәт Миңнеәхмәт улы Әхмәтшин – Сытырыш бабай йөрөгән, ул үҙе телгә маһир, таҡмаҡ сығарырға оҫта булған.

***“Рабочий класс, үҙе ас, үҙе ялангас”,*** - тигән һүҙҙәрен әле лә иҫкә алалар, ә шаян таҡмағы үҙе бер мәрәкә: тракторы бик ҡәҙерле булған, һөртөп, майлап ҡына торған. Һөртөргә сепрәге бөткәс, ыштанын һалып һөрткән дә, тракторында ыштанһыҙ ҡайтып килә, ти. Үҙе былай тип йырлай, имеш:

**“Колхоз булды баштарым,**
**Нужа күрә башланым.**

**Тағы бер аҙ колхоз булһам**
**Күренә пөстөй баштарым”.**

Әхмәтшиндарҙың быуындан-быуынға күсеп  килә моңдары. Йырға маһирлығы, бөгөнгө көндә районның иң моңло йырсыларының да береһе Ризида Әхмәтшина, Тольятти ҡалаһында йәшәүсе Сәлиха Әхмәтшина ла урындағы  халыҡҡа моңо менән үтә лә таныш.





Шәмсетдин Шипаев, Әбүбәкер Иҫәнбаев, Хөсәйен Хисмәтуллиндар һуғышҡа саҡлы трактористар. Икенсе быуын механизаторҙары – Салауат Әхмәтшин, Батыр Иҫәнбаев, “Хеҙмәт Ҡыҙыл байраҡ” ордены кавалеры – комбайнсы Солтангәрәй Ибраһимов, Шакирьян Дәүләтшин, Мәскәүҙең ВДНХ һына 2 тапҡыр еңеүсе булып барған кукуруз үҫтереүсеһе Шәрип Әхмәтшин, Хәмит Йосопов, Рәшит Сәлимгәрәев, Иҙиәт Ғәлләмов, Сәйфулла Бирҙеғолов, һ.б. – улар 1200 га ерҙе һөрөп-сәсеп-урып илде иген менән тъәмин иттеләр.



1921 йылда башланғыс мәктәп асыла, тәүге уҡытыусы булып – Юныс исемле ситтән килгән кеше була, 1932 йылда мәктәп 7 йыллыҡ булып эшләй башлай – директоры Килдебәков була, ҡатыны Шафиға башланғыс кластарға белем бирә.




Ауыл борон-борондан иманлы, динле булған, был турала иҫке фотолар ҙа асыҡ һөйләй, 2 ҙур мәсете йома, ғәйет намаҙҙарында тулы булған. Совет власы урынлаштырылғас, мәсеттең береһен клуб итеп күсереп һалғандар, әйткәндәй, ул бина бөгөн дә клуб вазифаһын үтәй. Икенсеһен – мәктәпкә төкәтмә иттеп төҙөгәндәр, унда беҙ белем алдыҡ, ул 1980 йылға саҡлы үҙ вазифаһын теүәл үтәне. Тәҙрәләре ҙур, йыуан, төҙ ҡыҙыл ағастан һалынған бина ине ул.

Яңы мәсет һалырға тип килтерелгән бура, склад ишек алдында 20-се быуаттың 90-сы йылдарына саҡлы ултырҙы. Нуримандан, ике арбаны бергә бәйләп, ат менән

ташығандар бүрәнәләрен. Өйҙәре бик шәптән булмаһа ла, ауыл халҡы мәсетте яҡшынан һалған – дин алда булған.

1954 йылда ауыл халҡы бер булып йыйылышып алған Ҡөрьән китабы, бөгөнгө көндә “Сәләм” мәсете түрендә һаҡлана. Китапты элекке ауыл муллаһы Миңлегәрәй бабай Боранғоловтың ҡыҙы Гөлсирә әбейҙең килене мәсеткә тапшырҙы.

Мәсеттәрҙе һүткәс ауыл ҡарттары йома, ғәйет намаҙҙарын Уҫаҡлы күл буйындағы Исмәйел төбәгенә барып уҡыр булған, тип һөйләп ҡалдырған мулла Сәлимйән бабай Дәүләтшин.

***Ауылда беҙгә билдәле муллалар:***

Илсеғол Нәҙерғолов (рев. сказки 1916 йыл)

Указлы мулла Рәхмәтулла Йәнбирҙин (рев.сказки 1834 йыл)

Зыязитдин Шаһабетдинов, Ғәләүетдин Хәйретдинов, Миңлегәрәй Боранғолов, Йәғәфәр Вильданов, Сәлимйән Дәүләтшин, Салауат Вәликәев. 2017 йылда “Сәләм” мәсете асылды.








Сәсеү эштәре тамамланғас Дим, Өршәк буйҙары башҡорттары йыйын үткәрер булған. Йыйын башҡорт халҡының борон-борондан демократик булыуын иҫбатлай, йыйын әлеге кеүек күңел асыу өсөн генә түгел, ырыуҙың көнкүрешен, хәлен, пландар төҙөү, хәрби мәсьәләне лә хәл итер өсөн йыйылған. Йәштәр йыйында бер-береһен күҙләгән, өйләнер өсөн дә бер сәбәп булған. Ни әйтһәң дә йыйын тәрән мәғәнәгә эйә, төрлө яҡтан уйланылған булған.

Шәжәрә төҙөгәндә шуға инандым, төрлө ауыл кешеләре бер-береһе менән хәбәрҙар булған, бер исем нәҫелдә генә түгел, ауылда ла һирәк ҡабатланған, киленде йыраҡтан төшөрөү – мотлаҡ булған – был бик күркәм, медицина яғынан да дөрөҫ күренеш.





Бына шул йыйындарҙа беҙҙең ауылдан 13 скрипкасы ҡатнашыр булған. Скрипканы Әбдлерәхим бабай Мырҙагәрәев үҙе яһаған икән.

Сибәр Уҫман (Хисмәтуллин)



Ҡара Уҫман (Хәжиев)

Фәхретдин һәм Ғәләүетдин Хәйретдиновтар

Кәлимулла, Ҡунаҡбай, Миңлебай, Ғәндәлиф Гузиндар

Айытҡол Солтанов

Әбдерәхим Мырҙагәрәев

Миңлеәхмәт Әхмәтшин

Иҫәнбай Муллағәлин

Кинйәбеҙ.

Ауыл мәҙәниәтле булған, үҙенең йырсы, таҡмаҡсылары, скрипкала уйнаусылары, бейеүселәре менән дә дан тотҡан.

Ҡартатайым Миңлебай Булатов һөйләй торғайны: “Клубта Минеғәлим (Гузин) булмаһа, уйын башланмай, барыһы ла уны көтә. Ул килеп тә керә, ҡыҙыл

ыштан, аяҡта сабата, һыҙғырып ебәрә, бейергә төшөп тә китә, уйын да башлана, иң кесе ҡыҙы Рәүзилә лә шундай бит, атаһына оҡшаған, дәртле бер ойоштороусы.

Ауылда Ҡәнзәфәр Вильданов еҙ ҡурайҙа уйнаған. Гармунсылар Фәрит Нуримановтар, Әфҡәт һәм Тәлғәт Әхмәтшиндар, Ғиндулла Мырҙагәрәев, Хәбибулла Хисмәтуллин, Ҡасим Ибраһимов, һ.б.

Эсер һыуыбыҙ - Олокүл, борон күл 3 өлөштән торған, Сүгермәк (Булатовтар артынан Гөлнур Хәйретдинова артына саҡлы). Яйпаҡ-түбән яҡта, Олокүл – үр яҡта. Олокүл башын Өйҙөрәк менән тоташтырып канау ҡаҙғандар, көрәк, ат ярҙамында. Ташҡын мәлендә Өйҙөрәктән һыу кереп 3 күлде бергә тоташтырып һыу күтәрелгән, күлдәр берләшкән – хәҙер исеме – Олокүл. Олокүл буйлап барған тау – Олокүл тауы.

Ҡайғыл тауы – граждандар һуғышы ваҡытында 3 армия бәрелешкән тау, ҡыҙылдар - Чапаевтың 25-се дивизияһы, аҡтар – Колчак армияһы һәм Башҡорт азатлығы хәрәкәтен Зәки Вәлиди етәкләгән. Ауыл кешеләренең күбеһе З. Вәлидиҙең азатлыҡ хәрәкәте яҡлы булған, был турала тарихи мәғлүмәттәр бөтөнләй тейерлек юҡ, унан-бынан ишетелгән хәбәрҙәр генә бар.

Шөнгәккүл станцияһына бронепоезд килтереп ҡуйып, азатлыҡ хәрәкәтен баҫтырғандар. Был турала шартлаған йәҙрәләрҙән ҡалған убалар һәм йыш табылған кеше һөйәктәре, ҡылыс һыныҡтары һәм патрондар ғына һөйләй. Ҡыҙылдар булһын, аҡтар булһын, һәр армия үҙ эҙен ҡалдырып киткән, әзмәүерҙәй ир-аттарҙы үҙ армияһына алып киткән, Гузин Кәлимулла, Хисмәтуллин Хәбибулла, һ.б. үҙе менән алып китеп, оҙаҡ йөрөгәндән һуң ғына ауылға ҡайтып керәләр.

### *Әүлиә тауы*

Ябалаҡлы ауылынан 2-3 саҡрымда ятҡан Ҡайғыл тауы теҙмәләренең бер түбәһен урындағы халыҡ Әүлиә тауы тип йөрөтә. Унда әүлиә Мөхәммәт Ибензаде Әмин ерләнгән. Ул заманында кешеләрҙе дауалаған, өшкөрөп ауыр сирҙәрҙән арындырған. Йәшәү дәүере, әлбиттә, аныҡ ҡына билдәле түгел. Уның зыяратына яҡын ғына түбәлә бронза эпохаһына ҡараған ҡәберлектәр урынлашҡан. Әүлиә тауының башынан, 40 өйлө мең ырыуының бер сиге-межаһы булған Ярыштау ҙа ап-асыҡ күренеп тора. Һәр әүлиәнең үҙ шишмәһе булған кеүек, Мөхәммәт-Яппар әүлиә

ерләнгән ерҙән алыҫ түгел, Өйҙөрәк йылғаһы буйында шишмә йөрәге тибә. – Ауылыбыҙҙың ҡотон, тыныслығын һаҡлап тороусы Әүлиәбеҙҙе оноторға ярамай. Уларға хөрмәт йөҙөнән Ҡөрьәндәр уҡып, доға ҡылып тороу беҙҙең бурысыбыҙ, - ти Ябалаҡлы ауылынан «Сәләм» мәсетенең имам-хатибы Салауат хәҙрәт.

*/Лена БУЛАТОВА, Шишмә районы/*

Ологүл тауы күл буйлап һуҙылған, күл аша Умарталыҡ, Юкәлек, Оло һил, Бәләкәй һил, Мөҡәтис төбәге, Ярсүгермәк күле, һ.б.

Һәр ауылдағы кеүек урамдарға исемде лә урындағы халыҡ үҙе биргән, эт урамы – уҫал кешеләр йәшәгәнгә шулай атағандар, Ҡомалаҡ төбәге – ауылдың түбән осон шулай атайҙар. Балды ҡомалаҡ менән асытып, зәһәрле итеп ҡоялар ҙа, үҙҙәре бик дружно итеп эсәләр ине, Күркә урамы – бер ваҡыт урамда шул саҡлы күп күркә үрсетәләр ине, ат менән дә, йәйәү ҙә үтерлек түгел, ошо күркәләр сәбәпсе булды ла инде, Үрьяҡ ос – ауылдың осо. Хәҙер инде официально был урамдар башҡаса атала, ә барыбер халыҡ телендә тәүгеләре һаҡлана.

Ауылыбыҙ борон-борондан килгән йолаларҙы йыҡмай, шуларға таянып донъя көткән, балаларҙы йәтим итеүгә юл ҡуймаған. Хисмәтуллина Бибиямал әбейҙең ире Хөсәйен һуғышта һәләк була, улы Дамир ҡала, Хөсәйендең бер туған ағаһы Рәхмәтйән һуғышта саҡта 4 балаһын йәтим ҡалдырып ҡарсығы үлеп китә. Һуғыш тамамланғас килен менән ҡайнаға бергә донъя көтәләр, тағы ла 4 балаға ғүмер бүләк итәләр. Йәтимлектән, һуғыш хәсрәттәренә асынып Бибиямал әбей ошондай таҡмаҡ йырлаған:

***Ирләр китә, ирләр үлә***
***Ирләр китә войнаға.***
***Ир үлгәнгә ҡайғырмайбыҙ***
***Ҡайтыр әле ҡайнаға.***

Хисмәтуллин Хайбулланың ағаһы үлгәс, 17 йәшлек кенә булыуына ҡарамаҫтан үҙенән күпкә оло еңгәһенә өйләндерәләр, һуғышҡа киткәс еңгә-бисәһе таҡмаҡлап хат яҙа:

***Оҙыял ябынаһыңмы,***

***Юрған ябынаһыңмы?***

***Төндә төштәреңдә күреп***

***Мине һағынаһыңмы?***

Ҡәйнеш-ире лә яуапһыҙ ҡалмай:

***Оҙыял да юҡ бында***

***Юрған да юҡ бында.***

***Баш осонда туптар шартлай***

***Һинең ҡайғың юҡ бында,*** - тип яҙа хатында.

Фронттан килгән хаттарҙы бергә йыйылып уҡыр булғандар, яуап хатын да күмәкләп яҙғандар, һағыш, һуғышҡа нәфрәт һүҙҙәре ул йылдарҙың ауыҙ-тел ижадында асыҡ сағылған.

Ибраһимов Мырҙагәрәй бабай Ленинградҡа торф сығарырға китеп, шунда төпләнеп ҡалған апаһы янына барып ҡайтҡас, бисәһе Һылыубикәгә йыр йырлаған:

***Олокүлдең һыуы туңған,***

***Туңмаған ере-йылыу.***

***Ленинградҡа барып ҡайттым***

***Аллаға шөкер, Һылыу.***

Мәғфиә Сәлимгәрәева таҡмағы, ире Рәшит – ҡара, теремек кеше ине; ғүмер буйы тракторҙа эшләне:

***Ана теге ҡара сурнай***

***Ҡайтып килә баҫыуҙан.***

***Бөгөн мине һуғып йыҡты***

***Тәмәкеһе бөткән асыуҙан.***

Ауылдың йор һүҙле, ихлас кешеләре бик күп ине.

Ауыл борон-борондан күп балалы ғаиләләре менән дә дан тотҡан. 9 балалы Гузин Минеғәлим, Зөлҡәрнәев Миңлебай, Ибраһимов Солтангәрәй, Әхмәтшин Шәрип, Дәүләтшин Сәлимйән, Хисмәтуллин Рәхмәтйән, һ.б.

8 балалы Бирҙеғолов Сәйфулла, Моратшин Хәләф, Яхин Тимеръяр, Яхин Тимерғәли, һ.б.

7 балалылар бихисап күптәр, өй аша тип әйтерлек.



Әсә даны һәм Әсәлек миҙалдары менән Ибраһимова Рәшиҙә, Әхмәтшина Флюра, Моратшина Ғәйшә, һ.б. бүләкләнә.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены (1971 йылда) һәм “За трудовое отличие” медале (1989 йылда) менән алдынғы комбайнсы Солтангәрәй Ибраһимов бүләкләнә.

Әхмәтшин Шәрип – алдынғы кукуруз үҫтереүсе, Мәскәүгә ВДНХ-ға 2 тапҡыр бара.

Бөйөк Ватан һуғышына 129 кеше киткән, шуның 48 - е генә Ябалаҡлыға әйләнеп ҡайтҡан. “Ҡыҙыл йондоҙ” ордены менән Булатов Миңлебай, Дәүләтшин Сәлимйән, Хисмәтуллин Рәхмәтйән, Кутлов Баттал наградланғандар.

“Дан” ордены менән Ибраһимов Мырҙагәрәй наградлана.

Хәрби бәрелештәрҙә ауылдың 7 егете һәм 1 кейәүе ҡатнаша, Миниахметов Мәхмүт 2 тапҡыр “Батырлыҡ” миҙалына лайыҡ була.

Әхмәтшин Харис - Ҡабулда, Әмирханов Рәмил – Кандагарҙа була, бер туған Риф һәм Рәмил Гузиндар, Ғәзим Вахитов, Ильгиз Минияров һәм ауылыбыҙ кейәүе Павел Корней Афған юлдарын үтеп, иҫән-һау әйләнеп ҡайталар.




***2021 йылдың 8 авгусында мең иле үҙенең олуғ улы шәхесе Мусабей улы Ҡәнзәфәр бейҙең ҡәбер ташын яңыртты. Мәжлескә хөрмәтле ҡунаҡтар, ауылдаштар, ырыуҙаштар осрашып аҡ ҡорбан салынды, Ҡөрьән уҡылып зекер әйтелде.***

Ҡәбер ташына Ҡәнзәфәр бейҙең ауылдаштарына әйткән һүҙе алтын хәрефтәр менән яҙылған:

***“...Тарихын белмәгән хаким менән сөйләшергә ярамаҫ. Халҡын сөймәгән, ихтирам итмәгән кешегә хаким булырға ярамаҫ...”***




***“Сәләм” мәсете ҡаршыһында мең ҡәбилә ырыуы башлығы – Ҡәнзәфәр бейҙең бюсты урынлаштырылды.***

Ошо эштәрҙе алдан йөрөп башҡарыусыларҙың береһе ауылыбыҙ имам хатибы Салауат Ҡорбанғәли улы Вәликәев. Ауылдаштар унын менән бик риза.

“Сәләм” мәсете 2017 йылдың октябрендә асылды, мәсет төҙөүҙә Гөлшат Сәфәрғәлина, Әлфәт Хасанов, Ғәли Хисмәтуллин, һ.б. ҙур өлөш индерҙеләр. Иман ҡайтыу – ауылға ҡот ҡайтыу, 16 өр-яңы өй төҙөлдө: Иҫәнбаев Раил, Хәкимова Ғәзимә, Суфияновтар – 2 өй бөтөрә, Руслан менән Гүзәл, Фатыхов Ремель, Павел Корней, Дәүләтшин Шәйгәрҙән, Сәлимова Лена, Хайретдинова Гөлнур, Әхмәтшин

Азамат, Ибраһимов Ильшат, Әхтәмова  Рәмилә, Ниғмәтйәнов Рим, Зөлкәрнәева Зенфира, Яхин Хәниф ошоға бер миҫал.

Урамдар, ихаталар төҙөкләнде, эсеп-иҫереп йөрөүселәр бөтөнләй тип әйтерлек бөттө, хәмер һатыу ҙа тыйылды. Ауыл халҡы әкренләп кенә булһа ла үҙ диненә ҡайта башланы, йәштәр ҙә дингә тартыла.

**Ябалаҡлы борон-борондан тирә-яҡта дан тотҡан ауыл булып йәшәгән, киләсәктә лә әүәлге данын, ҡотон ҡайтарып, телен, ерен һаҡлап йәшәр тигән ҙур өмөттәбеҙ.**

*/Лена БУЛАТОВА/*

## Ябалаҡлы ауылы байлығы һәм ғорурлығы

### *Әүлиә тауы*




Ябалаҡлы ауылынан 2-3 саҡрымда ятҡан Ҡайғыл тауы теҙмәләренең бер түбәһен урындағы халыҡ әүлиә тауы тип йөрөтә. Унда әүлиә Мөхәммәт-Яппар ерләнгән, ул заманында кешеләрҙе дауалаған, өшкөрөп ауыр сирҙәрҙән арындырған. Йәшәү дәүере, әлбиттә, аныҡ ҡына билдәле түгел. Уның зыяратына яҡын ғына түбәлә бронза эпохаһына ҡараған ҡәберлектәр урынлашҡан. Әүлиә тауының башынан, 40 өйлө мең ырыуының бер сиге-межаһы булған Ярыштау ҙа ап-асыҡ күренеп тора. Һәр әүлиәнең үҙ шишмәһе булған кеүек, Мөхәммәт-Яппар әүлиә ерләнгән ерҙән алыҫ түгел, Өйҙөрәк йылғаһы буйында шишмә йөрәге тибә. – Ауылыбыҙҙың ҡотон, тыныслығын һаҡлап тороусы Әүлиәбеҙҙе онотторға ярамай. Уларға хөрмәт йөҙөнән Ҡөрьәндәр уҡып, доға ҡылып тороу беҙҙең бурысыбыҙ, - ти Ябалаҡлы ауылынан «Сәләм» мәсетенең имам-хатибы Салауат хәҙрәт.

*/Лена БУЛАТОВА, Шишмә районы/*

### *Ҡурай һәм ҡылыс Ростовтағы Дон музейында*

19 февральдә, Бөйөк Ватан һуғышының «Самбек бейеклектәре» Халыҡ хәрби-тарих комплексында «Ростов юнәлешендә... 1941–1943 йылдарҙа Ростов өлкәһен азат итеүҙәге һуғыш хроникаһы» альбомын презентациялау булды. Альбом Еңеүҙең 75 йыллығына бағышланған.  Презентацияла Башҡортостаныбыҙҙан БДМУ микробиология кафедраһын етәкләүсе, Бөтә донья Башҡорттары Ҡоролтайы ағзаһы

Марсель Тойғонов, сәнғәт институтының кафедра доценты Артур Ғайсаров та ҡатнашты. Ростов өлкәһендә йәшәүсе милләттәштәребеҙ һәм Әфғанстан хәрби бәрелеш ветерандары ла ситтә ҡалманы. Башҡортостан вәкилдәре музейға 1927 йыл өлгөһөндә эшләнгән Златоуст ҡылысы һәм ҡурай бүләк иттеләр. Бындай ҡылыс менән 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙәре-ҡылыссылары ҡоралланған булған. Ә бына ҡурай, Ростов өлҡәһен азат иткәндә бәреп төшөрөлгән немец самолетының патрубкаһынан эшләнгән һәм ул легендар кавалеристар менән Берлинға саҡлы барып еткән. Ҡылыс һәм ҡурай музейҙың 112-се Башҡорт атлы дивизияһына арналған стендта ҡуйыласаҡ. Музей өсөн махсус эшләнгән аппаратура – башҡорт яугирҙәренең, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының хәрби юлын, тарихын һөйләй – был да яҡташтарыбыҙ бүләге булды. Артур Ғайсаровтың ҡурай моңдары Дим буйҙарына алып ҡайтты. Милица Авраменконың ялҡынлы казак йырҙары бөтәһен дә дәртләндерҙе.

*/Автор: Мәхмүт Сәлимов, отставкалағы подполковник, Ростовтағы Дон ҡалаһы/*

### *Мин – тархандар нәҫеленән*

***Мәхмүт Сәлимов*** 1960 йылда Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында тыуа, бала сағы, үҫмер йылдары әсәһенең тыуған ауылы Иҫке Ябалаҡлыла үтә. Отставҡалағы подполковник, ҡораллы бәрелештәр ветераны, Башҡортстан яҙыусылар союзы ағзаһы, яугир башҡорт халҡының героик тарихын сағылдырған әҫәрҙәр авторы Ростовтағы Донда йәшәй һәм әүҙем ижад итә. Мәхмүт Бәкер улы Башҡортостанға, тыуып-үҫкән ерҙәренә йыш ҡайта. Ул «Төньяҡ амурҙары» башҡорт ойошмаһын ойоштороусыларҙың береһе.



– Тархан, аҫаба башҡорт һәм яугир ырыуы вәкиле булараҡ, яҙмыш миңә үҙе ҡушҡан, хәрби кеше булырға.Нәҫелемдә, кантон службаһы ваҡытында егеттәребеҙ Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге хәрби училищела һәм кадет корпустарында уҡыған. Атайым Бәкер фин һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, олатайым – Герман һәм граждандар һуғышында, ҡартатайым – Япон, унық атаһы – Ҡырым, ҡарт атаһы – 1812 Ватан һуғышында ҡатнашҡан кешеләр. Беҙ башҡорттар – яугир халыҡ, яу ҡайтарғанда исеменә һәм намыҫына бер ҡасан да тап төшөрмәгән рухлы, көслө милләт, – тип таныштыра үҙенең ырыу,нәҫел тарихы

менән Мәхмүт Сәлимов. Уның факттар менән иҫбатланған, башҡорттарҙың хәрби юлын, тарихын сағылдырған әҫәрҙәрен уҡыу бик ҡыҙыҡлы. Башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, көнкүрешен тасуирләгән хикәйәләре лә фәһемле. Гәзит уҡыусыларыбыҙға Мәхмүт Бәкер улының «Һуңғы хан тураһында легенда» китабынан ҡыҙыҡлы өҙөк тәҡдим итәбеҙ.

– Был минең яҡташтарыма, ҡатын-ҡыҙҙар көнө менән бүләк булып барһын, – ти Мәхмүт.

Кистәрен ойоҡбаш бәйләгән әсәйем әленән-әле танауына шыуып төшөп йөҙәткән күҙлеген төҙәткеләп ҡуя. Улар уға ҡамасаулап ҡына ҡалмай, уның изгелек бөркөп торған күҙҙәрен ҡаплай ине. Шул саҡ минең күҙемә, уның ике битендә, бик дөрөҫ һәм танауынан бер үк йыраҡлыҡта урынлашҡан, ике миң салынды. Оҙаҡ уйлап та тормай, үҙемдең асышымды әсәйемә еткерҙем. Ул, ғәҙәтенсә күҙлеген төҙәтеп, миңә йылмайҙы ла: «Был, балам, ябай миң түгел, ә иң», – тине. Ҡулындағы бәйләм энәләре тынып ҡалды, йөҙө илаһи нур менән балҡып китте. Хәтирәләр уны алыҫта ҡалған баласағына алып ҡайтты, бите буйлап йәш бөртөгө ағып төштө, ул уны йәшертен генә һөртөп ҡуйҙы ла, йылмая биреп, дауам итте: «Был миң түгел, ә иң», – тип ҡабатланы ул. «Борон-борондан исемендә миң һәм битендә иңе булғандарҙы бәхетһеҙлек, күҙ тейеү, сихыр-зәхмәт урап үтә, тип һанағандар. Был ғөрөф-ғәҙәт меңле башҡорттарында бик борондан килә, беҙ ҙә балам һинең менән ошо мең ырыуына ҡарайбыҙ. Иң – ырыу ҡыҙҙарын башҡа ырыу һәм милләттәрҙең урлап китүенән дә һаҡлауҙың бер сараһы булған, ә инде кем дә кем ҡыҙҙарҙы иркенән һәм намыҫынан мәхрүм итә ҡалһа үлем яҙаһы кисектергеһеҙ булған. Сит-ят ерҙәрҙә лә ошо иң ярҙамында меңлеләр бер-береһен танып белгәндәр», – тип хәтирәләрен тамамланы бөгөнгә әсәйем.

Ә мин үҙ сиратымда: «Бына ни өсөн минең ағайҙарым Миңленуриәхмәт, Миңлевәли, Миңлеғәли һәм башҡа күп туғандарымдың исеме миңле тип башлана икән, үҙемдең дә тулы исемем Миңлемәхмүт икәненә төшөндөм. Беләһе ине, тағы ла ниндәй бөйөк эштәр өсөн тыуғанмын икән, тип уйланым мин. Ошо кистә мин тәү тапҡыр меңлеләр һәм үҙемдең дә ошо ырыуға ҡарауымды белдем».

*/Лена Булатова тәржемәһе, Шишмә районы/;*     *Фотола: Мәхмүт Сәлимов*

***Һуғыш һәм тыл ветерандарын онотмайым***

Минең исемем Эльза, 2006 йылда тыуғанмын. Үҙемде бәхетлемен, тип уйлайым, сөнки мин тыуғанда ике ҡартатайым, дүрт ҡартинәйем, ике олатайым, ике өләсәйем иҫән-һауҙар ине. Ҡартатайымдар Бөйөк Ватан һуғышы, ә ҡартинәйемдәр тыл ветерандары икәнен өләсәй һәм олатайымдар һөйләүе буйынса бик яҡшы beләм. Ҙур хөрмәткә лайыҡ ошо яҡын кешеләремдең дә Бөйөк Еңеүгә килтергән өлөштәре хаҡында бәйән итергә булдым.




Иң оло ҡартатайым **Хабибулла Хисмәтуллин** 1900 йылда Иҫке Ябалаҡлы ауылында күп балалы ғаиләлә тыуа. Граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Башта хеҙмәт армияһына алына, үҙе теләп фронтҡа китә. Будапешт һәм Вена ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша. Тыныс тормошта колхозда эшләгән. Тирә-яҡҡа даны таралған көрәшсе булған, гармунда оҫта уйнаған.

Ҡатыны Шәмсебәҙәр Ҡунаҡбай ҡыҙы (1915 йылғы) тыл ветераны. Колхоз баҫыуҙарында, бесән әҙерләүҙә, фермаларҙа ирҙәрҙе алмаштырып эшләргә тура килә ул ваҡыт ҡатын-ҡыҙҙарына. Ҡартинәйем 99 йәшендә был донъянан китте.




**Миңлебай Булатов** 1907 йылда Ябалаҡлыла тыуған. Ул минең ҡартатайымдың атаһы. Үҙ заманының алдынғы ҡарашлы, белемле кешеһе. Һуғыш башланғансы Шишмә район комитетында инструктор булып эшләй. Һуғыш башланғас Әлкә, Благовещен ҡалаларында йәш һалдаттарҙы өйрәтә, 112-се Башҡорт атлы дивизияһының политругы ла була. Польшаны азат иткәндә яралана. Коммунист. Лейтенант. Ҡыҙыл йондоҙ ордены кавалеры. Тыныс тормошта колхоз рәйесе. Ҡатыны Миңлебикә Баймөхәмәт ҡыҙы (1907 йыл) тыл ветераны. Баҫыуҙа, ырҙын табаҡтарында, фермаларҙа эшләп Еңеү көнөн яҡынайтҡан.




**Улдары Бәғеҙәт Миңлебай улы** (1931 йылғы) минең ҡартатайым, тыл һәм хеҙмәт ветераны. Һуғыш осоро балаларына, яу яландарында ҡан ҡойған атайҙарын алмаштырып, колхоз йөгөн үҙ иңдәрендә тартырға тура килә үҫмер малайҙарға.12 йәштән колхоз баҫыуҙарында иген иккән, төндәрен ат көткән. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа ат егеп Белорет урмандарынан Шөнгәккүл станцияһына паровоздарға яғыу өсөн утын, күмер ташыған ул тиҫтерҙәре менән. 1950-1953 йылдарҙа Хабаровск өлкәһендә Хәрби һауа десанты ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт итә. Тыныс тормошта малсылыҡҡа ғүмерен бағышлаған, Башҡортостан Хөкүмәтенең маҡтау грамоталары, ҡиммәтле бүләктәренә лайыҡ булған.

Ҡартинәйем Әдибә Әхмәтвәли ҡыҙы һәм ҡартатайым Мәсғүт Әбделғәни улы Шаймөхәмәтовтар турында яҙып үткәйнем инде.

Илебеҙҙең Көнсығыш сиктәрен ҡартатайым Әхмәтзыя Улямаев һаҡлаған. Ул 1921 йылда Түбән Тирмә ауылында донъяға килгән. Һуғыштан һуң Йәрми ауыл советы рәйесе булып эшләй. Ҡатыны Әнисә Солтан ҡыҙы (1927 йыл) тыл ветераны. Ғүмерен колхоз эшенә биргән кеше, һуғыш ваҡытында ҡыҙҙар менән бесән сапҡан, ырҙын табаҡтарында эшләгән, кистәрен фронттағыларға ойоҡбаш, бейәләй бәйләгән. Бөгөнгө көндә ҡартинәйемә 93 йәш. Һәр ғаиләгә ҡағылып үткән ҡәһәрле һуғыш. Бөгөнгө тыныс тормош өсөн ҡартатайҙарыбыҙ, ҡартинәйҙәребеҙ алдында беҙ бурыслы. Уларҙы иҫкә алып, исемдәрен белеп ҡалайыҡ.

*/Эльза Шаймөхәмәтова, 7-се синыф укыусыһы, Шишмә ҡасабаһы/*

### *Еңеү һалдаттары*

Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын билдәләгән көндәрҙә, һуғыш, тыл һәм хеҙмәт ветерандары атайым Миңлебай Ғәлим улы һәм әсәйем Суфия Сәлим ҡыҙы Юламановтарҙы ла хәтергә төшөрөп үтәһем килә. Институтты тамамларға ла өлгөрмәй, атайымды һуғыштың беренсе көндәренән үк фронтҡа алалар. Карелия, Киев, Варшава ҡалаларын азат итеп, йәш лейтенант үҙе командовать иткән взводы менән Германия еренә саҡлы барып етә. Яралана, яңынан һуғышҡа китә, Еңеү көнөн Берлинда ҡаршылай. Һалдат тыуған яҡтарына 1946 йылда ғына ҡайтыу бәхетенә ирешә. Ҡайтыу менән ең һыҙғанып мәктәп эшенә сума, емерек хәлгә килгән мәктәп бинаһын, ауыл халҡы ярҙамында төҙәтеп, тирә-яҡ ауылдарҙан уҡыусылар йыйып эш башлай. Шул дәүерҙә осрата ла инде беҙҙең әсәйебеҙ Ҡырмыҫҡалы районы



Ҡарлыманбаш ауылы һылыуы – Суфия Сәлим ҡыҙын. Улар матур, татыу ғүмер кисерҙеләр, беҙгә биш балаһына үрнәк булдылар. Аҡҡоштар кеүек бер-береһенә тоғро булып, бәхетле йәшәнеләр, был донъянан да, аҡҡоштар шикелле, бер-бер артлы китеп барҙылар. Еңеүҙең һәр сәғәтен, һәр көнөн фронтта, тылда үҙҙәренең фиҙаҡәр хеҙмәте менән яҡынайтҡан ҡәҙерле кешеләребеҙҙе илебеҙ онотмаһын, килер быуындарыбыҙ ғорурланһын.

*/Нурия Юламанова-Ғилманова, Иҫке Ябалаҡлы ауылы/*

*Фотола: Миңлебай һәм Суфия Юламановтар*

### *Батырлыҡ бер ҡасан да онотолмай*

Совет халҡы Бөйөк Ватан һуғышында еңеүҙең 40 йыллығын билдәләгәндә, 1985 йылда, хужаһын таба I дәрәжә Ватан һуғышы Ордены. Сталинград өсөн барған алыштарҙа күрһәткән батырлытары өсөн, Иҫке Ябалаҡлы ауылында тыуып-үҫкән Ҡорбанғәли Вәликәев наградлана. Һуғыш башланғанда Дәүләкән һөнәрселек училищеһында уҡып йөрөгән үҫмер егетте Уральский хәрби училищеһына уҡырға ебәрәләр. Ә 1942 йылдың ғинуарында, 19 йәше лә тулып өлгөрмәгән курсант Сталинград өсөн барған ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнаша. 27-се гвардия дивизияһының, 89-сы уҡсылар полкының,танкка ҡаршы ротаһында уҡсы булып хеҙмәт итә Ҡорбанғәли Тимерғәли улы. 1943 йылдың майында башы ҡаты яралана, госпиталгә



эләгә. Яралары төҙәлгәс тыуған яҡтарына юл тота. Һалдат күкрәген «За оборону Сталинграда», Гвардия значогы бизәй ул саҡта, тик бына I дәрәжә Ватан һуғышы ордены 42 йылдан һуң ғына уның күкрәгендә балҡый.

Һуғыш тамамланғас, күрше ауыл ҡыҙы Мәхмүҙә Килмөхәмәт ҡыҙы менән тормош ҡороп, 6 улдарына ғүмер бүләк итәләр. Улдарының иң кесеһе Салауат атай нигеҙен һыуытмай, ауыл халҡын иманға өндәп, «Сәләм» мәсетендә имам-хатиб вазифаһын үтәй. Яугир атай-олатайҙарыбыҙҙың яҡты иҫтәлектәрен киләсәк быуындарыбыҙға ла еткереү беҙҙең бурыс тип иҫәпләйем. Ишеткән-белгәндәрҙе яҙып, һөйләп ҡалдырайыҡ бергә.

*/Айгөл Шаймөхәмәтова, Шишмә районы/*

Фото:Ҡорбанғәли Вәликәев

### *Өйҙөрәк тамағы*

Мең иле ерҙәрен һуғарыусы ике йылға бергә осрашҡан урын – Өйҙөрәк тамағы, ул Ябалаҡлы ауылынан 1–1,5 саҡрымда ята. Мул һыулы Дим (Күгиҙел) йылғаһына, ҡояш нурҙарында көмөш тәңкәтулҡындарын уйната-уйната, Өйҙөрәк килеп ҡушыла. Йылға уртаһында барлыҡҡа килгән бәләкәй ултырауҙарҙа ҡауҙы, торна кеүек ҡоштарҙы ла йыш осратырға була. Артабан Дим тулҡындарын өйөрөлтә-өйөрөлтә юлын дауам итә. Һул ярында йөҙйәшәр мөһабәт аҡ тирәктәр үҫә, әйтерһең дә улар ошо гүзәллекте яҡлап һаҡта тора. Ҡаршы ярҙа Ҡыҙҙар сағылы күҙгә ташлана, ул үҙе генә лә серле риүәйәттәр менән һуғарылған. Борон-борондан был урынды ерле халыҡ та, ситтән килгән ҡунаҡтар ҙа ял итеү өсөн хуп күргән. Ябалаҡлы элек-электән ҡымыҙы менән дан тоткан, өләсәйем Гөлйыһан Ғариф ҡыҙы Хисмәтуллинаның (1890 йылғы):

– Ҡымыҙниктар Өйҙөрәк тамағындасатыр ҡороп, бер-нисә ғаилә йәй буйына ҡымыҙ эсеп, ял итеп ята торғайнылар, – тип һөйләгәне хәтерҙә ҡалған.

Тирә-яғында балан ҡыуаҡлыҡтары, гөлйемеш үҫә, йоморо күлдәр теҙмәһе, таллыҡтар, сәсеп үҫтергән кеүек аҡ тирәктәрҙең йәш үҫентеләре буй еткерә. Сәскәләрҙең хуш еҫенән баш әйләнә. Тәбиғәттең ошо хоҙурлығы тәнгә сихәт, йәнгә тыныслыҡ бирә.

*/Айгөл Шаймөхәмәтова, Шишмә районы/*

***Уңыштар һиңә, Ильгиз!***



Иҫке Ябалаҡлы ауылында тыуып-үҫкән Ильгиз Миңлеәхмәтовҡа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров «Башҡортостандың атҡаҙанған артисы» исемен тапшырҙы.

Бөгөнгө көндә Ильгиз Мәскүт улы Нефтекамала Дәүләт Филармонияһында режиссер вазифаһын башҡара. Ул Булат Йосоповтың «Беренсе Республика»фильмында Ғөбәй Дәүләтшин, «Бабич»та Мастислав Кулаев ролдәрен уйнауы менән дә билдәле.

Ильгиз Ябалаҡлы дөйөм белем биреү мәктәбендә уҡый, артабан Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыкаль тәрбиә биреү гимназия-интернат мәктәбендә белем ала һәм Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө Дәүләт сәнғәт академияһының театр факультетыныңТаңсулпан Бабичеваның эстрада артисы класында шөғөлләнә.

Тамашасылар, телевизор ҡараусылар Ильгизде «ЕвроАзия йөрәге» халыҡ-ара бәйгеһенең алып барыусыһы итеп тә яҡшы беләләр.

Ауылдаштар Ильгиз Миңлеәхмәтовтың ҡаҙаныштары менән ғорурланалар һәм алда уға уңыштар, ҙур сәхнәләр теләйҙәр.

*/Айгөл Шаймөхәмәтова, Шишмә районы/*

***Ябалаҡлы борон-борондан тирә-яҡҡа дан тотҡан ауыл булып йәшәгән, киләсәктә лә әүәлге данын, ҡотон ҡайтарып, телен, ерен һаҡлап йәшәр тигән ҙур өмөттәбеҙ.***



***Ябалаҡлы ауылы тарихы**: мәғлүмәти белешмә/төҙ. МББ библиографы Р.Ф. Гәрәева.- МАМУ “Шишмә районы ултыраҡ-ара китапханаһы”.- 2021. -  36 б, илл.*